*Фуат **СӨЛӘЙМӘНОВ,***
*тарих фәндәре кандидаты*



# Мерәҫ ауылы тарихы

Баймаҡ районы Мерәҫ ауылының тарихын тәүге булып күренекле тарихсы, ауылдар тарихы буйынса төп белгес, профессор Әнүәр Әсфәндийәров өйрәнде, ғалим тарафынан уның XIX быуаттағы тарихына дөйөм белешмә бирелде, энциклопедия өсөн мәҡәлә яҙылды[1]. Был хеҙмәтте яҙғанда беҙ уның асыштарына, фекерҙәренә киң таянабыҙ, һылтанабыҙ, уларҙағы тарихты өйрәнеү методтарын ҡулланабыҙ.

Был эш алдына ҡуйған беҙҙең маҡсат — Мерәҫ ауылы тарихын киңерәк һәм тәрәнерәк итеп, унда булып үткән ваҡиғаларҙы, кешеләр, хужалыҡтар яҙмышын деталләштереп, боронғо замандарҙан алып 1917 йылға тиклем ваҡыт арауығын ентекләп яҡтыртыуға ынтылыу, артабанғы замандағы ваҡиғаларҙы дөйөмләштереп күрһәтеү.

Эштең башында тәү сиратта археологик ҡомартҡыларҙы яҡтыртыуға туҡталып китәйек. Республикабыҙҙың көньяҡ-көнсығыш төбәге археологик материалдарға иң бай төбәктәрҙән һанала, ә хәҙерге Баймаҡ районы ерендә ата-бабаларыбыҙ ҡалдырған мәҙәни эҙҙәр бигерәк күп. Шулар иҫәбенә Мерәҫ ауылы һәм уның янындағы башҡа ауылдарҙың тирә-яғында табылған ҡомартҡылар ҙа инә. 1976 йылда нәшер ителгән «Башҡортостандың археологик карта»һында түбәндәге мәғлүмәттәр тупланған, бында шуларҙы килтереп үтәйек:

«Талкасские стоянки. Неолит (раздел VII). Оз. Талкас. Баймакский район. По берегам озера в 1969 г. выявлено 5 стоянок каменного века. Раскопки двух из них вскрыли культурные слои неолитического времени, насыщенные керамикой с гребенчатым орнаментом и изделями из яшмы. Матюшин Г.Н., Морозов Ю.А., Рыков Ю.А., Туркина Л.Г., 1970, с.150»[2]; «Мерясовское местонахождение. Эпоха бронзы (раздел VIII). Дер. Мерясово, Баймакский район. У учителя истории Нигаматовской средней школы Мурзагалина А.Г. хранится каменный топор, найденный учащимися в маленьком ручейке, текущем с горы Ирендек, у дер. Мерясово. Топор относится к эпохе бронзы. Рязапов М.Ш. Отчет 1969»; «II Мерясовские курганы (раздел VIII). Дер. Мерясово, Баймакский район. Напротив деревни, на левом берегу р.Таналык, вдоль дороги Баймак—Темясово, в 2,5 км от дер. I Торфоучасток (ферма Мерясовской бригады) расположены 16 земляных курганов диаметром 13—19 м, высотой 35—60 см. Рязапов М.Ш. Отчет 1969»; «I Мерясовские курганы (раздел VIII). Дер. Мерясово, Баймакский район. 4 земляных кургана находятся в 1,5 км к юго-западу от деревни, в 10 м к западу от дороги Баймак—Тубинский. Диаметр 14—18 м, высота 0,3—0,5 м. Рязапов М.Ш. Отчет 1969»[3].

Шулай итеп, археологтар билдәләүенсә, Мерәҫ, шулай уҡ Бәхтегәрәй (Әпек) һәм Иҫән ауылдары урынлашҡан ерҙә, уларҙың тирә-яғында — Ирәндек тауы итәгендә, Талҡаҫ күле, Аҡминле йылғасығы буйҙарында, яңы таш быуатынан (беҙҙең эраға тиклем VI— IV мең йыллыҡтар) һәм бронза быуатынан (беҙҙең эраға тиклемге II мең йыллыҡ — I мең йыллыҡтың башы) алып кешеләр йәшәгән. Улар араһында, әлбиттә, артабанғы осорҙарҙа башҡорт халҡының нигеҙен тәшкил иткән ҡәбиләләр ҙә булған.

Ауылдан алыҫ түгел ерҙә, Ирәндек тауындағы Суҡыташ ҡаяһы янында, Ҡәртәташ атамалы тәбиғәт һәм тарих ҡомартҡыһы урынлашҡан. Беҙгә бер төркөм крайҙы өйрәнеүселәр менән уның тарихын өйрәнеү маҡсатында бер нисә тапҡыр сәйәхәт ҡылырға насип булды[4]. Был ҡомартҡының асылы хаҡында байтаҡ фекер бар, шуларҙы айырым ҡарап үтергә кәрәк.

Береһе буйынса, Ирәндектәге таш-ҡаяларҙың уйһыуыраҡ урындарына терәп, оло-оло яҫы таш киҫәктәренән (плиталарҙан) теҙеп һалынып, кәртәләп эшләнгән үҙенсәлекле Ҡәртәташ, башҡорттар ҡырағай аттарҙы — тарпандарҙы ҡулға эйәләштереп, байҙарҙың хужалыҡтарында меңәрләгән, урта хәллеләрҙең йөҙәрләгән, ә ярлы тип иҫәпләнгәндәрҙең тиҫтәләгән баш ат аҫрап, йылҡысылыҡ ныҡ үҫешкән, башҡорт менән ҡаҙаҡ араһында барымта-ҡарымта күренештәре күҙәтелгән осорҙа барлыҡҡа килгән. Был турала Бәхтегәрәй (Әпек) ауылының 90 йәшлек аҡһаҡалы Ишбулды олатай Ҡаһармановтан түбәндәгеләр яҙып алынған: «Тарпандар тураһында миңә олатайым, ә уға уның олатаһы һөйләп ҡалдырған. Ауылдан алыҫ түгел ерҙә Ҡәртәташ бар. Ул Ирәндек тауының башында урынлашҡан. Беҙҙең башҡорт халҡы ошо ҡырағай аттарҙы ҡулға эйәләштерә торған булған. Уларҙы күмәк һыбайлылар Ҡәртәташҡа индереп бикләгән. Ҡәртәташ өс яҡтан бейек ҡаялар менән уратып алынған, ә көнбайыш яғын кешеләр таштарҙан ҡойма һуғып кәртәләгән. Был урын таш һарай ролен

*Ҡәртәташ фрагменты*



үтәгән. Беҙ бәләкәй саҡта был таштар һалынып кәртәләнгән һымаҡ ята ине. Хәҙер, ваҡыт үтеү менән, ел-ямғыр, ҡырағай туристар кәртәләнгән таштарҙы емереп, аҡтарып бөткән. Уның майҙаны сама менән бер гектар тирәһе. Ҡәртәташҡа килеп ингән тарпандар бер яҡтан да сығып китә алмаған. Башҡорттар ҡырағай аттарҙы ҡылдан үрелгән арҡандар менән ҡороҡлап тотҡан һәм ҡулға өйрәткән. Тарпандар ҡулға бик тиҙ эйәләшкән. Улар хәҙерге аттарҙан бер аҙ ҡайтышыраҡ булған»[5].

Этҡол ауылында йәшәүсе сәсән Шәһәрғәзе Ғәбдиевтың (1898—1979 йй.) Ҡәртәташ тураһында ошондай риүәйәте лә ҡыҙыҡлы: «Бик борон замандарҙа башҡорт-ҡаҙаҡ яуҙары булып торған. Шул осорҙан алып барымта-карымта йолалары йәшәп килгән. Барымта — сит халыҡтар тарафынан ҡыуып алып кителгән малды, бигерәк тә йылҡы малын, урланған ҡатын-ҡыҙҙы, тартып алынған мөлкәтте көс, яу сабып кире ҡайтарыу йолаһы. Яйыҡ йылғаһының аръяғында йәшәүсе ҡаҙаҡтар аңғармаҫтан төркөм-төркөм булып башҡорт ерҙәренә үтеп инеп, уларҙың йылҡы малын ҡыуып, ҡатын-ҡыҙҙарын урлап киткән. Башҡорттар ҙа шундай юл менән ҡарымта яһаған. Ҡан ҡойошто булдырмау, уны алдан иҫкәртеү һәм һаҡланыу маҡсатында башҡорттар Ирәндек тауының бейек урынында һәр саҡ һаҡ тотҡан. Улар иң уңайлы урын тип Таш Һарайҙы һайлаған. Был ер — Ирәндек тауының иң бейек нөктәләренең береһе. Ҡәртәташтан юғары күтәрелһәң, Ирәндек тауының башында Сүлмәкташ тигән урын да бар. Унда биш-алты биҙрә һыу запасы һаҡлағандар, ә Ҡәртәташ эсендә һәр саҡ эйәрле-йүгәнле аттар әҙер торған. Яйыҡ йылғаһы яғынан һыбайлы ҡаҙаҡтар күренеү менән, Сүлмәкташта ут яғып, тирә-яҡ ауылдарға сигнал бирелгән, һәм ауылдар буйлап хәбәрсе сапҡын ебәрелгән»[6]. Урындағы урмансы, Риза ағай Нәҙерғоловтың беҙгә һөйләүе буйынса ла, был ҡая башы башҡорттарҙың күҙәтеү урыны булып та хеҙмәт иткән. Күҙәтсе булып хеҙмәт итеүсе кеше бейеклеге 1 саҡрым самаһы булған ошо тау башынан Бөрйән ырыуы биләмәләренең сиктәренә ҡаҙаҡ баҫҡынсыларының яҡынлашыуын алдан күреп, Суҡыташ ҡаяһы башында урынлаштырылған оҙон һайғауға бәйләнгән бесәнгә ут төртөп, ауылдарға хәбәр итергә тейеш булған.

Ҡәртәташ тураһындағы боронғо башҡорт халыҡ көйө «Саптар юрға» легендаһында уның реаль ҡулланышта булыуы һөйләнелә. Унда ошондай юлдар бар: «Борон заманда бер ярлы башҡорт егете байға эшләп, эш хаҡына бәләкәй генә, үҙе йонсоу, саптар төҫлө бер етемек тай алған. Шулай булһа ла, ат ат булыр әле тип, уны бик яратҡан һәм яҡшылап тәрбиәләй башлаған... Егет үҙе шәп ҡурайсы булған. Саптар юрғаһын да ҡурай тыңларға һәм ҡурай моңона юрғаларға өйрәткән. Бара-тора шундай шәп һәм оҫта юрғалаған, хатта сапҡан ат та етә алмаған, ти уға... Байҙар, Саптар юрғаны һат, тип егеткә көн дә килгәндәр, ҙур хаҡ бирәбеҙ йәки бер ат урынына 2—3 ат һайлатып бирәбеҙ, тип тә ҡарағандар. Ләкин егет йәнендәй күргән Саптарын — дуҫын һатмаған һәм һатырға ла уйламаған. Йылдарҙың береһендә егет Ирәндеккә бесән эшләргә сыға. Ошо ваҡыт бай ҡуштандары егетте үлтерәләр. Хужаһының фажиғәле үлтерелеүен белгәс, Саптар юрға, хужаһы янына килеп, уның үле кәүҙәһен еҫкәп, төрткөләп ҡараған. Ер сапсып, ярһып кешнәгән, илаған меҫкен хайуан. Байҙар Саптарҙы тоторға тип уның янына киләләр. Ләкин Саптар уларҙан тоттормаған. Ҡайһы беренә ҡаршы сабып, атынып, елкәһенән умыра тешләп йыҡҡан, типкеләгән уларҙы. Былай ҙа тота алмағастары, күмәкләп килеп, йылҡылар менән ҡуша

ҡыуып, Ҡәртәташҡа индерәләр. Ҡәртәташтың ауыҙ яғын 12 тороҡ һайғау менән кәртәләйҙәр. Саптар юрға 12 тороҡло кәртәне лә аша һикереп сығып ҡаса. Шулай итеп, Саптар юрғаны тота алмағандар. Саптар ошо ҡотолоуҙан ҡайҙалыр китеп күҙҙән юғалған һәм был тирәгә ҡабат әйләнеп килмәгән. Байҙар йәүкәләп эҙләп ҡарағандар, ләкин Саптарҙы таба алмағандар. Ошо ваҡиғанан һуң был урын Ҡәртәташ, Саптар кәртә тип исемләнеп киткән һәм халыҡ телендә ике исем менән йөрөй башлай»[7].

Ҡәртәнең диуарҙары, бөгөнгәсә һаҡланып ҡалған өлөштәренән күренеүенсә, оло һәм ғәйәт ҙур ауырлыҡтағы плиталарҙан тигеҙ, матур итеп күтәрелеп эшләнелгән булған. Һәр береһе 2 метрҙан ашыу оҙонлоҡта булған ҙур-ҙур яҫы таштарҙан теҙеп һалынған стеналарҙың ҡасан һәм нисек күтәрелеүе әлегә тарихи сер булып ҡала.

Әлбиттә, үрҙә килтерелгән фекерҙәр, легендалар нигеҙҙә барыһы ла тарихи дөрөҫлөктө яҡтырта. Әммә был серле урынды үҙ күҙҙәрең менән күреп, тикшереп ҡарағандан һуң, бындағы таш төҙөлмәләрҙең күпкә боронғораҡ осорҙарҙа барлыҡҡа килеү мөмкинлеген дә фаразлап була, тип әйтергә мөмкин. Беренсенән, Ҡәртәташ тирәһендә табылған ҡомартҡыларҙан (мәҫәлән, таш балта, таштан шымартып яһалған кеше һыны, металл иретеү ҡорамалдары эҙҙәре, таш диуарҙар) сығып, был тирәлә кешеләр неолит (яңы таш быуаты) дәүерендә үк һәм бронза быуатында ла көн күргәндер, тип әйтеп була. Икенсенән, Ҡәртәташты урындағы халыҡ Сүмәләташ, Суҡыташ, Ҡапҡаташ, Таш һарай, Таш ҡала тип тә атап йөрөтә. Археолог Миҙхәт Рәжәпов уны Таш ҡаласыҡ тип атаған[8]. Сүмәләташ тигән исем ҡая башында тигеҙ таштарҙа урынлашҡан, кеше ҡулы менән соҡоп яһалған булһа кәрәк, таш сүмәлә (һауыт) булыуынан килеп сыҡҡан. Әйткәндәй, төрлө ҙурлыҡтағы (диаметрҙағы) бындай таш сүмәләләр (һауыт) Уралдың башҡа ҡая-таштары баштарында ла йыш осрай. Екатеринбург ғалимдары иһә уларҙы бронза быуатындағы боронғо кешеләр баҡыр, бронза металдарын иретеү эшендә

*Ҡәртәташ фрагменттары*



ҡорамал (мейес) итеп ҡулланған, тигән фекерҙә[9]. Кәртәташтағы таш сүмәләнең эсендә лә ҡором эҙҙәре асыҡ күренә. Был урындың Таш ҡала тигән атамаһы ла бында ҡасандыр кешеләр йәшәгән урын булыуына ишара яһай. Шулай итеп, был ҡомартҡы бик бай һәм серле күренеш, уны киләсәктә тарихи һәм археологик яҡтан тағы ла ентекләберәк өйрәнеү яҡшы булыр ине, ул саҡта боронғо һәм урта быуаттарға ҡараған тарихыбыҙға бәйле оло асыштар яһалыуы ла мөмкин, тигән һығымта яһарға кәрәктер.

Ирәндек итәгендә урынлашҡан Мерәҫ ауылы тирәһе менән бәйле ваҡиғалар 1735—1740 йылдарҙағы мәшһүр Ҡараһаҡал яуы, Талҡаҫ күлендәге 1755 йылғы «Бөрйән бунты», йәғни мулла Батырша ихтилалы, 1773—1775 йылдарҙағы бөйөк Салауат Юлай улы етәкләгән көрәш замандарында ла булып үтә.

Билдәле булыуынса, Бөрйән ырыуы башҡорттары Ҡараһаҡал яуында киң ҡатнашҡан[10]. 1740 йылдың 26 сентябрендә төҙөлгән «Экстракт, составленный в Табынске в Канцелярии начальника Комиссии Башкирских дел Л.Я.Соймонова, о ходе башкирского восстания с 28 июля по 10 сентября 1740 г.» исемле документта Ирәндектә урынлашҡан бер урында карателдәрҙән йәшеренгән Ҡараһаҡал етәкселегендәге 200-ҙән ашыу башҡорт баш күтәреүселәренең тотолоуы тураһында әйтелә: «27-го числа оной же капитан Кублицкой доношением объявил: посланною де от него партией уфинских казаков с сотником Шешминцовым в 216 человеках поймано в урочище на горе Ирендике...»[11] Ирәндек тауында урынлашҡан был урын Кәртәташ булыуы бик ихтимал.

1755 йылдағы Талҡаҫ күле буйында күтәрелгән һәм рус ғалимы, академик И.И.Лепехин (1740—1802) тарафынан «Бөрйән бунты» тип аталған башҡорт ихтилалы тураһында, унда ҡатнашҡан бөрйән, түңгәүер, ҡыпсаҡ батырҙары хаҡында бихисап документтар килеп еткән[12]. Уларҙан күренеүенсә, Ирәндектә аҫыл таштар эҙләүсе таусы Брагин һәм уның командаһы башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын ирҙәренән тартып алып, мәсхәрәләй, халыҡтан ришүәт йыя, мал-мөлкәтен талай башлағас, килмешәктәрҙең был енәйәттәренә түҙмәгән башҡорт батырҙары көрәшкә күтәрелә. Бөрйән улысынан Сураш Мәргән батыр, Йылан Этҡол һәм Ҡарағай-ҡыпсаҡ улысынан Хоҙайбирҙе мулла Баҙраҡовтар ҡан эскес Брагинды юҡ итеү эшен башҡаралар. Бының менән бәйле ваҡиғалар хәҙерге Иҫән, Бәхтегәрәй (Әпек), Мерәҫ ауылдары урынлашҡан ерҙәрҙә башланып китеп, бөтә башҡорт иленә таралған. Бөрйән улысынан старшина Бикбулат Арҡаев, отставкалаға старшина Әликәш Һөйөндөков, сотниктар Исмәғил Айытҡолов, Ҡотлоюл Ҡалтырсаҡов, Хәлил Уразгилдин, Дәүләтбәк Аслансин, десятник Мөксин Исмәғилев, Морат Апталов, Ҡарағай-ҡыпсаҡ улысынан Хоҙайбирҙе мулла Баҙраҡов, Түңгәүер улысынан старшина Аҙнаҡай Муллаҡаев, Мөхәммәт Аллағыуатов, Ҡинйәбай Төндөков, Үҫәргән улысынан Алдаш Услуев, Яйлүк Раптанов, Саптараяҡ Ҡотлоғужин, Тамъян улысынан старшина Яналы Апаҡов һ.б. бик күп батырҙар ойошторған яу бөтә Рәсәй батшалығына яңғырай.

Салауат Юлай улы етәкләгән көрәш осорона ҡараған икенсе бер документтан да күренеүенсә, 1774 йылдың октябрь айында ҡырғыҙ (йәғни ҡаҙаҡ. — ***Ф.С.***) урҙаһында баш күтәреүселәр сафында булып, илдәренә ҡайтҡан Бөрйән улысы Ҡинйәбулат Әликәшов командаһында булған 6 башҡорт батыры, Таулыҡай ауылынан 20 саҡрымдан алыҫыраҡ ерҙә ятҡан Ирәндек тауҙарындағы таштар араһында йәшеренгән урындарынан эҙләп табылып, каратель, коллежский советник И.Л.Тимашевтың отряды тарафынан ҡулға алына. Документта Ҡотлогилде

Абдрахманов, Морат Апталов, Таулыҡай Сураҡов, Ҡасҡын Һамаров, Муйнаҡ Сөләймәнов, Ҡаранай Моратов, Төркмән Йәнсәитов кеүек мәшһүр башҡорт ихтилал етәкселәренең яҙмышы тураһында һүҙ алып барыла[13]. Документтарҙа «в урочище на горе Ирендике», «в Ырентицких горах между каменьем», йәғни «Ирәндек тауындағы урында», «Ирәндек тауҙарындағы таштар араһында» тип аталған баш күтәреүсе батырҙар йәшеренгән урын — үрҙә ҡарап үтелгән Ҡәртәташ булыуына шик тыумай. Ысынлап та, заманында һәр яҡтан тәбиғи ҡая-таш һәм кеше ҡулы менән күтәрелгән таш ҡоймалар менән уратып алынған, кеше күҙенән ҡуйы ҡарағас урманы менән ышыҡланған, йәшәү өсөн бер ни тиклем шарттар (эсәр һыу — шишмә, емеш-еләк, һунарсылыҡ өсөн ҡырағай йәнлектәр) ҙа булған был урынды ошондай мәлдәрҙә башҡорт яугирҙары дошмандарҙан йәшеренеү урыны булараҡ йыш ҡулланған, тип ҡарарға етди урын бар.

Ә.З.Әсфәндийәров билдәләүенсә һәм тарихи сығанаҡтар буйынса, хәҙерге Баймаҡ районына ҡараған Мерәҫ ауылы — Бөрйән ҡәбиләһе Монаш ырыуы башҡорттарының боронғо ауылдарының береһе. Уның тарихы 1816 йылдан башланып китә. 1816 йылдың ноябрь айында төҙөлгән VII ревизия мәғлүмәттәренән күренеүенсә, Мерәҫ ауылына ошо йылда Ырымбур губернаһы Үрге Урал өйәҙе 6-сы башҡорт кантоны Бөрйән улысы Сыңғыҙ ауылы башҡорттары нигеҙ һалған. Был турала документта былай тип әйтелә: «Йорт старшинаһы Мерәҫ Биктимеров, подпоручик Сәғит Биктимеров, йорт есаулы Хәсән Мерәҫов, йорт сотнигы Әйүп Сәғитов ғаиләләре менән, начальствоның ҡушыуы буйынса, 1816 йылда яңы һалынған Мерәҫ ауылына күсерелделәр»[14]. Шулай итеп, ауыл уға нигеҙ һалыусыларҙың юлбашсыһы булған йорт старшинаһы Мерәҫ Биктимеров исемен йөрөтә.

Ауылды нигеҙләүселәрҙең 1816 йылдағы йорт-ғаилә хәленә ентекләберәк туҡталып китәйек. Өҫтә күрһәтелгән документ буйынса, ауылды һалыусыларҙың ябай ҡатлам башҡорттары булмауын күрә алабыҙ — улар барыһы ла кантон идаралығы чиновниктары, Бөрйән улысында, Сыңғыҙ ауылында күренекле шәхестәр булған. Подпоручик чинын йөрөткән 69 йәшлек (1747 йылда тыуған) Сәғит Биктимеровтың йорто Сыңғыҙҙа 1-се һанлы итеп күрһәтелгән, ул Ҡаһарман (1794), Ҡаһтаран (1795), Зөлҡәрнәй (1792), Ғабдулваһап (1805) исемле улдары менән бергә көн күргән. Ә уның Әйүп (1789) исемле өлкән улы өйләнеп, айырым йортта йәшәгән. Шуны ла билдәләп китәйек, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был документта Сыңғыҙҙан Мерәҫкә күсеүселәрҙең ҡатын-ҡыҙҙар составы күрһәтелмәгән.

Сәғит Биктимеровтың подпоручик чинында булыуына иғтибар итәйек, был уның герой-яугир булыуына бер ишара. Әйтергә кәрәк, был юғары чин башҡорт ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итеүселәр араһында бик йыш осрамай. «Табель о рангах» атамалы чиндарҙы һәм уларҙың урындарын билдәләүсе документта ул 13-сө класлы чинға һәм обер-офицер дәрәжәһенә тура килә. Шулай уҡ был чиндар эйәһенең быуындан-быуынға күсеүсе дворян дәрәжәһен алыу мөмкинлеге лә булған. Әммә әлегә подпоручик чинына уның нисек, ҡасан лайыҡ булыуы билдәле түгел. Шуныһы асыҡ, был дәрәжәне ул 1812 йылғы һуғышта йәки унан алда булып үткән Рус-швед (1788—1790) йәки Прусс (1807) походтарында ҡатнашып алған булырға тейеш. Шуны ла әйтергә кәрәк, беҙгә билдәле булған башҡорт яугирҙары араһынан был чинды йөрөтөүселәр, ғәҙәттә, яуҙарҙа ҡатнашып, батырлыҡтар күрһәткән, 4-се дәрәжәле Изге Анна ордены менән бүләкләнгән булған. Мәҫәлән, шуларҙың береһе — 14-се Башҡорт полкы командиры Абдулла Сурағолов[15].

Әйтергә кәрәк, Мерәҫтең атаһы кем икәне билдәһеҙ, Биктимер исеме 1816 йылғы ревизия материалдарында ла күренмәй. Бөрйән улысы тарихында 1755 йылғы башҡорт күтәрелешенең әүҙем көрәшсеһе Биктимер Айытов (документта Айтов. — ***Ф.С.***) исемле батыр булыуы билдәле. Крайҙы өйрәнеүсе Рамаҙан Үтәғолов һөйләүе буйынса, профессор Әнүәр Әсфәндийәров Биктимер Айытовты Мерәҫтең атаһы булыуы бик мөмкин, тигән фекер әйткән булған һәм уның Биктимер тигән үҙ ауылы булыуын да билдәләгән, 1755 йылда Биктимер каторгаға ебәрелгәс, был ауыл кешеләре, шул иҫәптән уның ғаиләһе, балалары туғандаш Сыңғыҙ ауылына күсенгәндәрҙер, тигән фаразды ла әйткән[16]. Әлбиттә, Биктимер ауылы Ә.Әсфәндийәров хеҙмәтендә ысынлап та телгә алына[17]. Әммә Биктимер Айытов тураһында тағы нимә билдәле? Ырымбур губерна канцелярияһынан Дәүләт хәрби коллегияһы контораһы ҡарамағына ебәрелгән баш күтәреүселәрҙең исемдәре теркәлгән, 1755 йылдың 19 октябрендә төҙөлгән «Ведомость» буйынса, Биктимер Айытовҡа 30 йәш икәне күрһәтелә, йәғни ул 1725 йылда тыуған булған. Тимәк, уның йәше 1752 йылда донъяға килгән Мерәҫ Биктимеровтың атаһы йәшенә тап килә. Документта уның һәм көрәштәштәренең ғәйебе тураһында былай тип әйтелә: «Бегали за Яик и по приезде на здешнюю сторону пойманы. При роспросах показали, якобы за Яик захвачены по неволе и оттоль бежали сюда для проведования о женах и о домашних своих. И намерение имели, ежели оные жены и домашние их здесь находятся, то остаться и жить здесь по прежнему; а буде здесь их найдут, то паки за Яик бежать»[18].

Әммә, әйтергә кәрәк, юғарыла килтерелгән мәғлүмәттәр менән генә Биктимер Айытовтың Мерәҫтең атаһы булыуы мөмкиндер, тигән фаразды иҫбатлап булмай. Киреһенсә, икенсе документтар буйынса Биктимер Айытовтың Мерәҫтең атаһы булмауын асыҡлай алдыҡ. Әммә был турала алдараҡ бәйән ителәсәк.

*Сумәләташ түбәһендәге таш һауыт*



Йорт старшинаһы Мерәҫ Биктимеров, йорт есаулы Хәсән Мерәҫов һәм йорт сотнигы Әйүп Сәғитовтарҙың чиндары ла уларҙың йәмғиәттә биләгән юғары урындары, белемле, ғәскәри хеҙмәттә батыр булыуҙары, идара итеү оҫталыҡтарына эйә булыуы тураһында ла һөйләй. Әйткәндәй, йорт старшинаһы, есаулы, сотнигы чиндарындағы «йорт» атамаһы был осраҡта айырым бер йортто йәки өйҙө белдермәйенсә, ә шул атама аҫтында (русса — «войсковой юрт» йәки «команда») старшина етәкселегендәге үҙ эсенә бер нисә ауылды һәм уның халҡын, йәғни команданы (ғәскәрҙе) алыусы кантон идаралығы ваҡытындағы иң түбән административ-территориаль берәмекте — ғәскәри йортто белдергән. Ауыл буйынса тултырылған ревизия ҡағыҙҙарының аҙаҡҡы битендә уның дөрөҫ итеп үткәрелгәнлеген раҫлап ҡул ҡуйғанда, йорт старшиналары үҙҙәрен «йортауай старшина» тип атағандар.

Йорт старшинаһы 64 йәшлек (1752 йылда тыуған) Мерәҫ Биктимеровтың йорто 1816 йылғы ревизия материалдарында 2-се һанлы тип билдәләнгән. Уның менән бергә 14 йәшлек Абушахман исемле улы һәм 15 йәшлек ике туған ҡустыһы Әүбәкир Әбделкәримов йәшәүе теркәлгән. Үрҙә билдәләп киткәнсә, бында ҡатын-ҡыҙҙар составы тураһында мәғлүмәттәр килтерелмәгән. Шулай ҙа, әйтергә кәрәк, уларҙың һаны, исемдәре, тыуған йылдары һ.б. тураһында 1834 һәм 1859 йылдарҙағы ревизия материалдарынан белеп буласаҡ.

Сыңғыҙҙан күсенеп, яңы ауылды нигеҙләүселәр рәтендә булған башҡа кешеләр тураһында ла мәғлүмәттәр бар: Ҡужабиргән Зәитов (1785 йылда тыуған, улы Иман (1802 йылда тыуған), Мөхәммәтрәхим Билҡошов (1788 йылда тыуған, улы Сәитбай 1807 йылғы), Ғөбәйҙулла Мәмәков, 1741 йылғы, Уразбай Алтынғужин (1785 йылда тыуған, улы Ҡунаҡҡужа 1795 йылғы), Ишбирҙе Бараҡаев (1770 йылда тыуған, улдары Хөсәйен 1790 йылғы һәм Ғәле 1793 йылғы), Рәхмәтулла Ғаитҡужин (1781 йылда тыуған, улы Ғабдулла 1810 йылғы), Хәбибулла Айыҭҡужин (1772 йылда тыуған, улдары Ишбулды 1790 йылғы, Ҡотлобай 1792 йылғы, Ғабдулла 1804 йылғы, Ғәбит 1806 йылғы), Ғәбделкәрим Ятанов (1752 йылда тыуған, улдары Әлибай 1786 йылғы, Сарлыбай 1792 йылғы, Ғәббәс 1795 йылғы), Йәнсәит Сынбулатов (1742 йылда тыуған, улы Байғүбәк 1786 йылғы, уның улы Ғәлиәкбәр 1808 йылғы), Ҡолбәйет Ғабдуллин (1778 йылда тыуған, улы Әбделкәрим 1800 йылғы, ҡустыһы Мөхәммәтшәриф 1791 йылғы), Сәйетйәғәфәр Асылов (1762 йылда тыуған, улдары Исмәғил 1787 йылғы, Яҡшымбәт 1797 йылғы, Ғайса 1801 йылғы), Юлғотло Итыков (1776 йылда тыуған, улдары Мөхәммәтхәсән 1796 йылғы, Мөхәммәтғәни 1810 йылғы), Юлғотлоноң ике туған ағаһы Ҡотлогилде Бикешев (1770 йылда тыуған, улдары Ҡотлоғәдәм 1800 йылғы, Ғәббәс 1803 йылғы, Баязит 1805 йылғы, Ҡотлозаман 1807 йылғы), Ҡотлобай Байышев (1774 йылда тыуған, улы Асланбай 1808 йылғы), Сырлыбай Астыров (1770 йылда тыуған, улдары Мөхәммәтәмин 1796 йылғы, Әүбәкир 1799 йылғы, Ғүмәр 1804 йылғы, Ғосман 1809 йылғы), Иҫәнбай Йәнкөсөков (1781 йылда тыуған, ҡустылары Иҫергәп 1793 йылғы, Ишбирҙе 1796 йылғы, Мерәп 1799 йылғы).

Был документтан сығып, 1816 йылда яңы барлыҡҡа килгән Бөрйән улыҫы Мерәҫ ауылында йәмғеһе 15 йорт булып, уларҙа 60 ир кеше йәшәгән, тип әйтеп була. Ә.З.Әсфәндийәров, башҡа сығанаҡҡа таянып, былар иҫәбенә ҡатын-ҡыҙҙарҙың һанын да ҡушып, ауылда барлығы 109 кеше йәшәгәнен билдәләгән[19].

Мерәҫ ауылы буйынса төҙөлгән 1816 йылғы ревизия ҡағыҙының аҙаҡҡы бите, уның дөрөҫ итеп үткәрелгәнлеген раҫлап, «К сей сказке сим податель Юртовой старшина Мряс Биктимеров по татарски (по-тюркски. — ***Ф.С.***) руку приложил» һәм ғәрәп яҙмаһы менән башҡортса «Йортауай ыстаршина Мерәҫ Биктимеров тархан ҡулым ҡуйҙым», тигән яҙма менән тамамлана[20]. Шулай итеп, был яҙма ауылды нигеҙләүсе Мерәҫ Биктимеровтың тархан титулына эйә булғанлығын да күрһәтә. Әлбиттә, был ваҡытҡа батша властары башҡорттарға күп кенә льготалар (ғәскәри хеҙмәт үтәүсе булараҡ, улар аҡсалата һәм натураль һалымдарҙан азат ителгән булалар), аҫаба ерҙәрҙе ҡулланыуҙа үҙаллылыҡ биреүсе тархан дәрәжәһенең киң тарала барыуынан ҡурҡып, уны бөтөрөү юлына баҫҡан була. Шулай ҙа, күреүебеҙсә, 1816 йылда башҡорттарҙың милли титулдарының береһе булған тарханлыҡ дәрәжәһе документтарҙа әле ҡулланылышта булған. Был күренеш буйынса күҙәтеүҙәребеҙҙе беҙ башҡа хеҙмәттәребеҙҙә лә яҙғайныҡ[21].

Профессор Ә.З.Әсфәндийәров билдәләүенсә, XIX быуат башында башҡорт тархандары, үҙҙәрен Рәсәй дворян сословиеһына теркәүҙәрен һорап, күпләп мөрәжәғәт итә башлай. 1821 йылға губерна властары тарафынан башҡорт тархандарының һаны билдәләнә һәм күпселегенең ата-бабаларына элекке замандарҙа батша тарафынан бирелгән грамоталарҙың юғалып бөткән булыуы асыҡлана, ә һаҡланып ҡалған грамоталарҙа тархандарҙы дворяндарға тиңләү тураһында яҙма табылмаған. Тарханлыҡ бөтөрөлгәндән һуң властар, ошо хәлде сәбәп итеп, тархандарҙың күпселек өлөшөн ябай башҡорт сословиеһына күсергән. Тархандарҙың бик аҙ өлөшө генә «действительный» офицер чиндарын, шәхси һәм быуындан быуынға күсеүсе дворянлыҡ дәрәжәһен ала алған[22]. 1834 йылғы ревизиянан күренеүенсә, подпоручик Сәғит Биктимеровтың улдары Ҡаһарман, Ҡаһтаран, Зөлҡәрнәй, Әйүп — «обер-офицер балалары» («обер-офицерские дети»), йәғни офицер урынын биләүсе зауряд-офицерҙың түгел, ә «действительный», ысын офицерҙың балалары тигән исем йөрөткәндәр, шулай булғас, уның льготалары менән дә ҡуллана алғандарҙыр[23].

1830 йылда Мерәҫ ауылы кешеләренең 16 йорт-хужалыҡ булып йәшәгән 4 утары булыуы билдәле: Аҡминле йылғасығында Әмин Хужабиргәновтың һәм Юлғотло Итикиндың, Шүлкә йылғаһында Сырлыбай Мөхәмметрәхимов һәм Ҡотлоғәләм Ҡотлогилдиндарҙың утарҙары урынлашҡан булған[24].

Ә.З.Әсфәндийәров үҙенең хеҙмәтендә, 1816—1817 йылдарҙа Мерәҫтән бер нисә ғаилә Әбделмөкмин тип аталған ауылға бүленеп сыға, бында шулай уҡ Сырлыбай Астыров күсә, яңы ауыл урядник Әбделмөкмин Иҙелбаевтың исеме менән атала, аҙаҡ уның атаһы Иҙелбай Астыровтың исеме менән билдәләнә, тип яҙа[25]. Әммә, әйтергә кәрәк, беҙ ҡараған документтар буйынса, 1816 йылда Сибай ауылынан күсеп сыҡҡан 60 йәшлек Иҙелбай Астыров, уның улы 25 йәшлек Әбделмөкмин Иҙелбаев, 59 йәшлек Ислам Астыров, 58 йәшлек Диңгеҙбай Астыров ғаиләләре менән Ғәле ауылында көн күргәндәр[26]. Ә 1834 йылдың 28 мартында төҙөлгән Ғәле ауылы буйынса ревизия материалдарына ярашлы, 78 йәшлек Иҙелбай Астыров, уның улы 43 йәшлек урядник Әбделмөкмин Иҙелбаев һәм 76 йәшлек Диңгеҙбай Астыров ғаиләләре менән һаман да Ғәле ауылында йәшәгәндәре күренә[27]. Шулай итеп, 1816—1817 йылдарҙа Әбделмөкмин тип аталған яңы ауыл әле барлыҡҡа килмәгән була. Был урында тәүҙә Сибай, Мерәҫ ауылдарынан сыҡҡан бер төркөм кешеләрҙең йәйләүгә сыҡҡанда, ер эшкәрткәндә, һунар иткәндә ҡулланыла торған ваҡытлыса йәшәү пункты —

утары урынлашып, аҙаҡ бында ауыл барлыҡҡа килгән булырға тейеш. Сөнки 1834 йылға ҡараған икенсе бер документта күрһәтелеүенсә, 6-сы башҡорт кантонының 8-се йортондағы Ғәле ауылының бер төркөм кешеләре үҙ ерҙәрендә Таналыҡҡа ҡойоусы Илсебикә атамалы йылғасыҡ буйында «күптән барлыҡҡа килгән утар» урынына күсенә һәм ул Әбделмөьмин (Әбделмөкмин) ауылы тип атала башлай. Утарҙы ауылға әүерелдереп, унда күсеп сығыусылар араһында 78 йәшлек Иҙелбай Астыров, уның улы 43 йәшлек урядник Әбделмөкмин Иҙелбаев, 77 йәшлек Ислам Астыров, 76 йәшлек Диңгеҙ Астыров ғаиләләре теркәлгән[28]. Яңы ауылға урядник Әбделмөкмин Иҙелбаевтың исеме бирелгән.

1834 йылда уҙғарылған VIII ревизия мәғлүмәттәре буйынса, Мерәҫ ауылында барлығы 39 йорт иҫәпләнеп, уларҙа ир енесенән барлығы 109 кеше (шуларҙың 92-һе ябай рядовой башҡорт һәм 17-һе «обер-офицер балалары») булыуы теркәлгән, ә ҡатын-ҡыҙҙар һаны 106-ға еткән. Тимәк, барлығы 215 кеше йәшәгән.

Әйтергә кәрәк, ауыл халҡы мосолман диненең барлыҡ ҡанундарына буйһоноп йәшәргә тырышҡан. Бында тәрән белемле дин әһелдәре лә булған. 1834 йылғы үрҙә аталған документтан күренеүенсә, ауылда 38 йәшлек указлы имам Мөхәммәтәмин Сырлыбаев йәшәгән. Ул 36 йәшлек ҡатыны Ғәйшә менән 8 йәшлек Мәрғүбә һәм 6 йәшлек Мөхипъямал исемле ҡыҙҙар, 4 йәшлек Фәхретдин һәм 1 йәшлек Хөснөтдин исемле улдар үҫтергән[29]. Әммә Мерәҫтә был осорҙа йәмиғ мәсете булмаған, халҡы Әбделмөкмин ауылының (аҙаҡ ул Иҙелбай тип йөрөлгән) мәхәлләһенә ҡараған. Был ауылда йәмиғ мәсет 1864 йылда һалынған. Ҡиләсәктә лә Сырлыбаевтар тоҡомонан указлы имамдар һәм мөғәллимдәр сыҡҡан, һәм улар Әбделмөкмин ауылы мәсетендә дингә тоғро хеҙмәт иткән: 1) Мирхәйҙәр Ғәле улы Сырлыбаев, 57 йәштә (1841 йылғы[30]), имам-йәмиғ һәм мөғәллим. Мәншур (указ) №958, 1876 йылдың 4 мартынан. 2) Ғималетдин Мөхәммәдәмин улы Сырлыбаев (1844 йылғы[31]), имам-хатиб һәм мөғәллим. Мәншур №1482, 1890 йылдың 27 апреленән. 3) Ғатаулла Ғәни улы Сырлыбаев, имам. Мәншур №7275, 1912 йылдың 12 сентябренән. 1915 йылда бында имам булып Ғатаулла Ғәни улы торған[32], күрәһең, был мәсеттең һуңғы имамы ла ул булғандыр.

1917 йылғы революция алдынан Мерәҫтә лә мәсет төҙөлә, әммә ул, совет осоро ныҡлап урынлашҡас, юҡҡа сығарыла. 1931 һәм 1933 йылдарҙа репрессияға дусар ителгән Мерәҫ ауылы муллаһы, 1883 йылғы, башҡорт, Исмәғил Мифтахетдин улы Ямантаев тураһында мәғлүмәт бар[33].

Әйткәндәй, бөгөнгө көндә Мерәҫтә халыҡтың яйлап дингә ҡайта башлауы күҙәтелә. Ауылдың тәүге (ағас) мәсетен ҡалҡытыуҙа колхоз рәйесе Рафаэль Бәҙретдин улы Байрамғоловтың ярҙамы ҙур булды. Иманға ҡайтыу эшен йәнләндереүҙә Хажиғәле хәҙрәт Рысмөхәмәтов, Асрар хәҙрәт Ғазин һәм Хәмзә хәҙрәт Хафизовтарҙың роле ҙур. Хәмзә Шәмсетдин улы Хафизов тураһында айырым әйтеп китергә кәрәктер. Ул 26 йыл Себерҙә эшләй, шунда дин юлына ҡайта, 2008 йылда изге хаж ғәмәлен башҡарыуға ирешә. 2010 йылда ауылдың элекке имам-хатибы Асрар хәҙрәт Ғазиндың (2011 йылда вафат булды) мөрәжәғәте буйынса, Мерәҫ ауылы мәсетенә имам-хатиб булып күсеп ҡайта. Юғары дини белем ала: 2008—2014 йылдарҙа Өфө Ислам университетында уҡып, уны уңышлы тамамлай. 2012 йылда Өфөләге фатирын һатып, шул аҡсаға Мерәҫ ауылында яңы мәсет төҙөтә башлай, әлеге ваҡытта уны төҙөү тамамланыуға яҡынлашып

килә. Шуныһын билдәләп китергә кәрәк, Мерәҫ ауылында һалынып ятҡан был мәсет архитектураһы буйынса Хәмзә Шәмсетдин улы эшләп, йәшәп киткән Себерҙәге Ҡогалым ҡалаһындағы мәсеткә оҡшатып, бик матур һәм мөһабәт итеп төҙөлә башлаған. Хәмзә хәҙрәт 2010—2014 йылдарҙа Мерәҫ ауылында имам-хатиб булып хеҙмәт итә. 2014 йылдың ноябрендә Хәмзә хажи Хафизов Баймаҡ районының имам-мөхтәсибе вазифаһына тәғәйенләнә. 2015 йылдың апрелендә уға ахун дәрәжәһе бирелә һәм мөфтөй тарафынан Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратының Урал аръяғы төбәгендәге вәкиле итеп билдәләнә. Күптән түгел, 2016 йылдың апрелендә, Башҡортостан мосолмандары Диниә назаратының ҡазыйы итеп һайланды.

2010—2014 йылдарҙа Мерәҫ ауылы мәсете мәзине булып Сәғәҙей Мөхтәр улы Нәҙербаев хеҙмәт итте (2014 йылдың 14 ғинуарында вафат булды). Хәҙерге ваҡытта Мерәҫ ауылында имам-хатиб вазифаһын Дәрүәрт хәҙрәт Фазлетдинов, ә мәзин вазифаһын Әхәт ағай Әсмәндиәров һәм Әхәт Хәсәновтар башҡара.

Артабан ауыл тарихы буйынса һүҙҙе дауам итәйек. 1834 йылғы ревизия материалдарында 1829 йылда Бөрйән улысы Бәхтегәрәй (икенсе исеме Мансур) ауылынан Мерәҫ ауылына «из киргиз башкирцы» — «ҡырғыҙ сығышлы башҡорттар» күсерелгән тигән мәғлүмәт килтерелә һәм ҡаҙаҡ сығышлы булған[34], әммә төрлө сәбәптәр арҡаһында башҡорттарға килеп һыйынып, башҡортлашып барған кешеләрҙең ғаиләләре булыуы тураһында әйтелә[35]. Үҙ сиратында, был ҡаҙаҡ ғаиләләре Бәхтегәрәй ауылына бөрйәндәрҙең боронғо ауылдарының береһе Ҡинйәбулат ауылынан күсерелгән була. Ҡаҙаҡ ғаиләләрен ауылдан-ауылға күсереп йөрөтөүҙе башҡорт-ҡаҙаҡ мөнәсәбәттәренең әле был осорҙа бер ни тиклем киҫкенерәк булыуы менән дә аңлатырға мөмкин.

Үрҙә һылтанған документтарға таянып, ҡаҙаҡ ғаиләләренә күҙ һалайыҡ. Бәхтегәрәй (Мансур) ауылында йәшәгәндәр һәм унан күсенеүселәр: Танат Туҡанов, 1777 йылғы, 1822 йылда мәрхүм; уның менән бер йортта көн итеүсе ҡустылары Тумас Туҡанов, 1788 йылғы, 1834 йылда Әҙелбай ауылына күсерелгән; Ямантай Туҡанов, 1791 йылғы, 1829 йылда властар тарафынан Мерәҫ ауылына күсерелә. Ошо уҡ йылда Мерәҫ ауылына ҡаҙаҡ Нуртай Буҡановтың ғаиләһе лә күсереп ултыртыла. Мерәҫ ауылында йәшәүсе «ҡырғыҙ сығышлы башҡорт» Ямантай Туҡановтың ғаиләһендә 30 йәшлек ҡатыны Йәнбүбәк (Жанбубек), 5 йәшлек Сәғилә һәм 3 йәшлек Шәһиҙә исемле ҡыҙҙары, 17 йәшлек Байрамғол, 13 йәштәге Мөхәммәтшәриф исемле улдары, шулай уҡ Ямантайҙың 15 йәшлек Шәфиулла исемле ҡустыһы ла йәшәүе теркәлгән. Нуртай Буҡановтың ғаиләһендә 35 йәшлек ҡатыны Иркә, 3 йәштәге улы Муллағол, 14 йәшлек Ҡанита, 12 йәшлек Хәҙисә (Ҡадичә), 9 йәшлек Ҡанифа, 7 йәшлек Нәзифә исемле ҡыҙҙары булыуы теркәлгән.

Әйтергә кәрәк, XVIII—XIX быуаттарҙа ҡаҙаҡ далаларынан, Урта Азиянан сыҡҡан ҡаҙаҡтарҙың ғына түгел, ә ҡалмыҡ, һарт, нуғай, мишәр, хатта фарсы (перс), ғәрәп, төрөк, әрмән, ҡараҡалпаҡ, бохаралы, хивалы, ҡобанлы, үзбәк, бадаҡшан, талыш, афған кешеләренең дә төркөм-төркөм булып йә берәмләп башҡорттар араһына инеп башҡортлашып китеүе киң генә күренеш булған[36]. Был хәл, әлбиттә, бер яҡтан, батша властарының башҡорт халҡы биләгән ерҙәрҙә халыҡ һанын арттырыу сәйәсәтен үткәреүгә ярашлы булһа, икенсе яҡтан, ул башҡорт йәмғиәтенең шул заманда башҡа халыҡтар алдында алдынғы булып танылыуын, Рәсәй батшалары тарафынан хөрмәт һәм танылыу тапҡан булы-

уын, башҡорттоң киң һәм изге күңелле, йомарт тәбиғәтле, йәғни толерант халыҡ булыуы тураһында ла һөйләй. Күсеп ултырыусыларҙың, төрлө халыҡ араһынан сығыуҙарына ҡарамаҫтан, башҡорт йәмғиәтенә ингәндән һуң уларҙың байтағы башҡорт аталып, аҫабалыҡ хоҡуҡтарын алыуы быға ҙур дәлил.

Шулай итеп, 1834 йылда уҙғарылған VIII ревизия мәғлүмәттәренән күренеүенсә, ауыл үҫкән, ҙурая барған, унда барлығы 39 йорт булып 215 кеше көн иткән. Сыңғыҙҙан тәү башлап сығып ултырыусыларҙың һаны яйлап кәмегән, донъя уларҙың балаларына, ейәндәренә күскән. Документтан күренеүенсә, подпоручик Сәғит Биктимеров 1832 йылда, 85 йәшендә мәрхүм булған. Был йорттағы донъя уның 49 йәшлек ҡатыны Көнһылыуға (икенсе ҡатыны булһа кәрәк. — ***Ф.С.***), улдары — 29 йәшлек Әбделваһапҡа һәм 13 йәшлек Әбделмәжиткә ҡалған. Әбделваһаптың үҙ ғаиләһе булған, 25 йәшлек ҡатыны Аҡылбикә менән 3 йәшлек Әбделвәхит исемле ул үҫтергән.

Мерәҫ Биктимеров 1824 йылда, 72 йәшендә мәрхүм булған. Документтан күренеүенсә, уның 31 йәшлек улы урядник Абушахман да вафат булған. Абушахмандың йортонда 30 йәшлек ҡатыны Ҡайбикә, 9 йәшлек Ибраһим, 6 йәшлек Исмәғил, 1 йәшлек Мөхәммәтәмин исемле улдары теркәлгән.

Мерәҫ Биктимеровтың тағы бер улы — 46 йәшлек Хәсән Мерәҫов зауряд-сотник чинында булғаны билдәләнгән, йортонда уның 40 йәшлек Гөлбар (Көлбар) исемле ҡатыны, 21 йәшлек өйләнгән улы Мөхәммәтсәлим теркәлгән. Хәсәндең тағы ла ике кесе улы булған: 6 йәшлек Мөхәммәтсалих һәм 2 йәшлек Мөхәммәтрәхим. Тимәк, тархан Мерәҫ Биктимеровтың нәҫеле дауамлы булған.

1836 йылғы архив мәғлүмәттәре буйынса, элекке йорт есаулы 51 йәшлек Хәсән Мерәҫов (йәғни Мерәҫ улы) Ярлыҡамышов зауряд-сотник чинында булып, 6-сы башҡорт кантонының 4-се йорт старшинаһы вазифаһын башҡарған. Ул ике ҡатыны — Көлбар һәм Малбикә менән Мерәҫ ауылында көн күреп, 8 йәшлек Мөхәммәтрәхим, 2 йәшлек Мөхәммәтзариф исемле ул һәм 5 йәшлек Зөлхизә исемле ҡыҙ үҫтергән. Хәсән Мерәҫов хеҙмәтен 1804 йылдың 1 майынан казак булып башлаған, 1808 йылдың 31 декабрендә зауряд-сотник чинына үрләтелгән, ә 1836 йылдың 1 ноябренән старшина вазифаһын башҡара башлаған. Походтарҙа булмаған, 1812 йылда Уртазым ҡәлғәһендә хеҙмәт иткән, 1818 йылдан 1834 йылғаса старшина чинында булған, тип күрһәтелә был документта[37]. Шулай итеп, күреүебеҙсә, Хәсән Мерәҫ улының Ярлыҡамышов фамилияһын йөрөтә башлауы билдәле булды. Тимәк, Мерәҫ Биктимеровтың (Биктимер улының) ҡартатаһы Ярлыҡамыш исемле булған, тигән һығымта яһарға мөмкин. 1839 йылда төҙөлгән икенсе бер документта инде Хәсән Мерәҫов Хәсән Ярлыҡамышов тигән исем-фамилия менән күрһәтелгән: «4-й юрт. Юртовой старшина зауряд-сотник Хасан Ярлыкамышев, при нем помощник зауряд-есаул Гайса Сафаров». Мерәҫ ауылы хаҡында былай тип күрһәтелгән: «Мрясевой... При реке Акминли от кантонного управления в 20 верстах». Ул заманда 6-сы кантон үҙәге булған Хәсән ауылы ла ошо 4-се йортҡа ҡараған булған: «Хасановой... При реке Каракубек в оной жительствует управляющий кантоном». Был 4-се йортҡа шулай уҡ Таулыҡай, Сыңғыҙ, Мөхәммәт, Әмин, Исҡаҡ, Йәнйегет, Абдрахман, Аҡбулат ауылдары ла ҡарап, барлығы 10 ауыл ингән[38].

1839 йылғы архив документы буйынса, Мерәҫ ауылында 18 ир-егет кантон хеҙмәтендә иҫәпләнгән, шуларҙың 7-һе обер-офицер балаларынан булған: 45 йәшлек Ҡаһтаран Сәғитов һәм Зөлҡәрнәй Сәғитов, 33 йәшлек Әбделваһап

Сәғитов, 26 йәшлек Сәйетбаттал Әйүпов, 21 йәшлек Ғәбделхалиҡ Ҡаһарманов, 18 йәшлек Таһир Әйүпов һәм Ғәбделмәжит Сәғитовтар. Ҡалған ир-егеттәр «башҡорт балаларынан», тип билдәләнгән[39]. Ошо документта — «6-сы башҡорт кантоны чиновниктарының формуляр списогы»нда, «обер-офицер балаларынан» 50 йәшлек зауряд-сотник Әйүп Сәғит улы Ярлыҡамышов теркәлгән. Шулай итеп, күреүебеҙсә, был осорҙа Әйүп Сәғитовтың да Ярлыҡамышов тигән фамилия йөрөтә башлауы билдәле булды. Тимәк, подпоручик Сәғит Биктимеровтың да (Биктимер улының) ҡартатаһы Ярлыҡамыш исемле булған, тигән һығымта яһап була. Шулай итеп, Мерәҫ һәм Сәғит Биктимер улдарының ҡартатаһы Ярлыҡамыштың исеме Ярлыҡамышов фамилияһында ҡайтанан ҡулланыла башлаған.

Ошо уҡ документта Таулыҡай ауылында ла Ярлыҡамышов фамилияһына күскән чиновниктар күрһәтелгән: урядниктар 49 йәшлек Ғабдулла Солтанғужа улы, 40 йәшлек Йософ Сәғәҙәт улы һәм 40 йәшлек Йәнтеле Илбай улы Ярлыҡамышовтар[40]. Сыңғыҙ менән Таулыҡай ауылдарының бер тамырҙан (Монаш ырыуынан) булыуын иҫәпкә алып, быларҙың Мерәҫ ауылындағы Ярлыҡамышовтарға бәйле булыуҙары мөмкинлеге тураһында фаразларға урын бар һымаҡ. Әммә, әйтергә кәрәк, ревизия материалдарында Йософтың атаһы Сәғәҙәт Сәфәров (йәғни Сәфәр улы), ә Йәнтеленең атаһы Илбай Исхаҡов (йәғни Исхаҡ улы) тип теркәлгән[41], шулай булғас, Ярлыҡамыш был чиновниктарҙың ҡартатаһының атаһы (прадед) булып сыға. Шуныһы ҡыҙыҡлы, 1859 йылғы ревизияла улар йәнә Йәнтеле Илбай улы Исхаҡов, Йософ Сәғәҙәт улы Сәфәров тип теркәлгәндәр, ә Ярлыҡамышов фамилияһында булыусылар күрһәтелмәгән[42]. Тимәк, был мәсьәләлә әлегә теүәл генә бер фекергә килеп булмай. Ике ауылда ла осраған бер төрлө фамилия араһында туғанлыҡ ептәре бармы икәнен халыҡта һаҡланған шәжәрәләрҙе ныҡлап тикшереп кенә асыҡлап буласаҡ.

Ғөмүмән, Мерәҫ һәм Сәғит Биктимеровтарҙың ҡартаталары Ярлыҡамыш исемле булыуы, үрҙәрәк ҡарап үтелгән Биктимер Аитовтың Мерәҫтең атаһы булыуы-булмауы мәсьәләһен бер аҙ асыҡлай төшә һымаҡ, йәғни документтарҙа Ярлыҡамыш исеменең табылыуы баш күтәреүсе Биктимер Аитов Мерәҫтең атаһы булған, тигән фекерҙең дөрөҫлөккә тап килмәүен күрһәтә.

Мерәҫ ауылы башҡорттарының төп хужалығы булып малсылыҡ һәм игенселек торған. Профессор Ә.З.Әсфәндийәровтың тикшеренеүҙәре буйынса, 1839 йылда Мерәҫ ауылының барлыҡ кешеләре (30 йортта йәшәүсе 236 кеше) йәйләүгә сыҡҡандар. Уларҙың хужалыҡтарында 120 ат, 245 һыйыр, 72 һарыҡ, 50 кәзә малы иҫәпләнгән. 1842 йылда 18 дисәтинә һөрөнтө ерҙәрҙә 123 кешегә (1834 йылғы ревизия буйынса) 512 бот яҙғы бойҙай («яровой хлеб») сәскәндәр[43].

1859 йылғы X ревизия мәғлүмәттәре буйынса, 1850 йылда Ырымбур губернаһы Үрге Урал өйәҙе 7-се башҡорт кантонының 11-се йортона ҡараған Мерәҫ ауылында барлығы 34 йорт иҫәпләнһә (документта был һан яңылыш 44 тип күрһәтелә. — ***Ф.С.***), 1859 йылда 29 йортта 173 кеше йәшәгән (90 ир-ат, 83 ҡатын-ҡыҙ). Ауыл начальнигы булып Мөхәммәтрәхим Хәсәнов хеҙмәт иткән[44]. Күреүебеҙсә, ауылда йорттар һаны кәмеүе күҙәтелә. Бының төп сәбәбе итеп мерәҫтәр араһында үлем осраҡтары йышайыуын күрһәтергә була: 1850 һәм 1859 йылдар араһында ауылда 12 ир-ат вафат булған, шуларҙың 5—6-һы —йорт хужалары. Вафат булыусылар һанынан сығып, 1850 йылда ир-ат һанының 102-гә тигеҙ булыуын әйтергә мөмкин.

1859 йылғы X ревизия мәғлүмәттәрендә 1851 йылда Әйүп Сәғит улы Биктимеровтың, ә 1853 йылда зауряд-сотник Хәсән Мерәҫ улы Биктимеровтың үлеме хаҡында әйтелә. Шуныһына иғтибар итәйек, был осорҙа Мерәҫ ауылында ла Ярлыҡамышов фамилияһы менән теркәлеүселәр булмаған, йәғни уны йөрөтөүселәр һәм уларҙың балалары элекке фамилияларына ҡайтҡан йәки аталары, ҡартаталары исеменән яһалған фамилияларҙы йөрөткән тип әйтергә мөмкин.

1863 йылда Мерәҫ ауылы 2-се Үрге Урал кантонының 2-се Бөрйән улысы Таулыҡай ауыл йәмғиәтенә ҡараған. Был улыстың административ үҙәге Ғәҙелшә ауылында, ә йәмғиәттең үҙәге Таулыҡайҙа урынлашҡан. Был ауыл йәмғиәтенә Мерәҫ һәм Таулыҡайҙан тыш Әмин һәм Әбделмөкмин ауылдары ла ингән[45]. 1860-сы йылдар башында 2-се Бөрйән улысында булған ауылдар башҡорттары, шул иҫәптән Мерәҫ ауылы халҡы һәм уларҙың ата-бабалары ла, бик борондан — 1600 йылдан алып билдәле Урал, Әсенбаш, Ҡалтыбан, Ҡараталүҙәк, Сереккүл, Ирәндектау, Ҡарас күле, Үләнкүл атамалы ерҙәрҙә йәйелгән 8 йәйләүҙә мал көткән[46]. Игенселек үҫешә барған һайын көтөүлектәр кәмегән. Мәҫәлән, 1853 йылда Үләнкүл йәйләүендә мал көтөлмәй, ә иген үҫтерелә башлаған[47].

1866 йылғы мәғлүмәттәр буйынса, Орск өйәҙенең 3-сө станы Аҡминле йылғасығы янында урынлашҡан Мерәҫ ауылында 23 йортта 166 кеше йәшәгән (79 ир-ат, 87 ҡатын-ҡыҙ)[48]. 1890 йылда 1-се Бөрйән улысы Мерәҫ ауылында 50 йортта 249 кеше йәшәгән (140 ир-ат, 109 ҡатын-ҡыҙ)[49]. 1900 йылда Аҡминле йылғасығы буйындағы Мерәҫ ауылында 27 йортта 211 кеше йәшәгәне, ағастан һалынған мәсет барлығы теркәлгән. Шулай уҡ ошо йылда Таналыҡ буйында 5 йорттан торған Мерәҫ утары булыуы һәм унда 30 кеше йәшәүе билдәләнгән[50].

Бик боронғо замандарҙан алып Ирәндектә төрлө металдың күп булғаны, уларҙы ата-бабаларыбыҙ табып-эшкәртеп, ҡулланып йәшәүе билдәле. Бында затлы металл — алтын да борондан күпләп табылған. XVIII быуаттың 40—50-се йылдарында батша властары тарафынан баҡыр сығарыу эше бик әүҙемләштерелгән. XIX быуатта Бөрйән улысы ерҙәрендә алтын сығарыу ныҡ киңәйә, Баймаҡ тау-руда районы барлыҡҡа килә. Бында Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән алтын эҙләүселәр килеп тула, хатта сит ил вәкилдәре килә. 1894 йылда Бельгия подданныйы, граф Э.В.Роттермунд, рус дворянины А.Ҡоншин менән берлектә, Мерәҫ алтын табыу приискыһында химия заводы төҙөү эшен башлай һәм составында алтын булған рудаларҙы химик эшкәртеү эшен яйға һала. Ошо осорҙа химия заводы эше өсөн Мерәҫ ауылы янында Талҡаҫ күленән һәм Ирәндектәге бер нисә шишмәнән баш алған Таналыҡ йылғаһы быуылып, хәҙер Граф күле тип йөрөтөлгән һыуһаҡлағыс төҙөлә[51].

Баймаҡ ҡалаһында йәшәүсе информатор, Түбә рудниғы ветераны Әхәт Шиһап улы Этҡолов[52] һөйләүенсә, элек был күл бик ҙурҙан булмай, тик совет осоронда, 1956 йылда хәҙерге ҙур быуа төҙөлә, Граф күле барлыҡҡа килә. Яңы быуаны төҙөү эшенә Ҡаҙағстандан килтерелгән ауыр йөк автомобилдәре — самосвалдар йәлеп ителә, экскаваторҙа эшләгән Әхәт Этҡолов уларға таш тейәй, йылғаны быуыу буйынса эштәрҙә лә ҡатнаша.

Мерәҫ һәм уға яҡын Иҙелбай, Бәхтегәрәй, Иҫән ауылдары халҡын 1914—1918 йылдарҙағы Беренсе донъя һуғышы ла урап үтмәгән, унда ҡатнашҡандар күп булған. Әммә был һуғышта башҡорттар айырым милли ғәскәр булдырмайынса, рус армияһының төрлө частарында хеҙмәт итеү сәбәпле, барлыҡ яугирҙарҙың да

исемдәрен барлап бөтөү бик ауыр. Байтаҡ башҡорт яугирҙары Беренсе донъя һуғышындағы батырлыҡтары өсөн бер йәки бер нисә Георгий тәреһе миҙалына лайыҡ була. Мәҫәлән, Иҫән ауылынан Хәлилулла Әминев (1886—1859) һуғышта күрһәткән батырлыҡтары өсөн 1914—1917 йылдарҙа 4 Георгий тәреһе менән наградланып, йәғни уның тулы банты эйәһе булып, шул замандағы Рәсәй геройы дәрәжәһенә күтәрелә. Әйткәндәй, ул арҙаҡлы башҡорт милли көрәшсеһе булараҡ та дан алған шәхес — РСФСР чемпионы. Шулай уҡ был һуғыш геройҙары исемлегенә Иҙелбай ауылынан ике Георгий тәреһе менән бүләкләнгән Шәкир Сырлыбаевты һәм башҡаларҙы индерергә була.

Граждандар һуғышы Мерәҫ халҡына ҙур ауырлыҡтар алып килә. Был осорҙа ауылда йорттар һаны ныҡ кәмей: әгәр 1920 йылда Мерәҫ ауылында 80 йортта 360 кеше йәшәгәне теркәлһә, 1925 йылда унда барлығы 37 хужалыҡ булыуы ғына күрһәтелгән[53]. 1926 йылғы архив мәғлүмәттәре буйынса, Йылайыр кантоны Таналыҡ улысына ҡараған Мерәҫ ауылында 47 йорт-хужалыҡ теркәлгән. Ауылда йәшәүсе барлыҡ кешеләрҙең фамилияларын күрһәтеп китергә була: Мерәҫовтар (4 ғаилә), Хәсәновтар (5 ғаилә), Кәримовтар, Әйүповтар, Ҡаһармановтар, Сәғитовтар (3 ғаилә), Ямантаевтар (9 ғаилә), Байрамғоловтар (3 ғаилә), Ишбирҙиндәр (3 ғаилә), Рәхмәтуллиндар (5 ғаилә), Әүбәкировтар (2 ғаилә), Ябаҡовтар (2 ғаилә), Ҡилмәковтар, Биктимеровтар, Әбүшахминдар, Ибраһимовтар, Дәүләтшиндар, Мөхәмәтрәхимовтар[54].

Артабанғы йылдарҙа ауылдың үҫеш динамикаһы түбәндәгесә күҙәтелә: 1939 йылда Мерәҫ ауылында 232 кеше йәшәгән (110 ир-егет, 122 ҡатын-ҡыҙ); 1959 й. — 293 кеше; 1989 — 696; 2000 — 109 кеше; 2002 — 738; 2010 йылда 655 (327 ир-егет, 328 ҡатын-ҡыҙ[55]) кеше иҫәпләнгән.

1930—1950-се йылдарҙа Мерәҫ ауылы кешеләренең байтағы Сталин репрессияһына дусар булған, шулар иҫәбендә: Ямантаев Ильяс Мифтахетдин улы, мулла, 1891 йылғы; Ямантаев Муса Мифтахетдин улы, колхозсы, 1904 йылғы; Байрамғолов Заһретдин, 1886 йылғы; Байрамғолов Нуриәхмәт Заһретдин улы, 1923 йылғы; Байрамғолов Нурислам Заһретдин улы, 1910; Байрамғолова Зәкиә Заһретдин ҡыҙы, 1927 йылғы; Байрамғолова Сәмсинур Заһретдин ҡыҙы, 1925 йылғы; Байрамғолова Хәлисә Абдрахман ҡыҙы, 1889 йылғы.

1932 йылда советтар тарафынан дошман тип билдәләнгән кулактарҙы, ысынында тырышлыҡ, эшсәнлек, эшҡыуарлыҡ менән урта һәм бай шәхси хужалыҡтар төҙөүгә ирешкән ауыл ҡатламын бөтөрөү һөҙөмтәһендә Баймаҡ районында ауыл хужалығын коллективлаштырыу эше тамамлана. Бында барлығы 31 колхоз, 3 совхоз, 2 МТС барлыҡҡа килә. Колхозлашыу осоронда Мерәҫ ауылы халҡы күмәк хужалыҡ булдыра, унда тәүҙә «Һаҡтау» артеле барлыҡҡа килә, бер аҙҙан «НаВИЛ» (йәғни «наследники Владимира Ильича Ленина») колхозы тип йөрөтөлә башлай.

Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, Мерәҫ ауыл советынан 108 ир-ат армия сафына алынып, фронтҡа китә. Тылда ҡалған ололарҙың, ҡатын-ҡыҙҙарҙың һәм балаларҙың лозунгыһы «Бөтәһе лә фронт өсөн, бөтәһе лә еңеү өсөн!» була. Һуғышҡа киткәндәрҙең 55-е тыуған илебеҙҙең азатлығы, беҙҙең бөгөнгө тормошобоҙ өсөн яуҙа һәләк була йәки хәбәрһеҙ юғала. 53 яугир яу ҡырынан ауылдарына имен-һау әйләнеп ҡайта. Мерәҫтәрҙең дошманды ҡыйратыуҙа тос өлөш индереүҙәре хаҡында Мөхәммәт Мерәҫовтың батырлыҡтарын миҫал рәүешендә ҡарап үтәйек. М.Мерәҫов 1941 йылдың көҙөндә һуғышҡа инә, 1942

йылда 53 фашисты юҡ иткән снайпер булараҡ танылыу ала. Башҡорт снайперы барлығы 97 дошманды юҡ итеүгә өлгәшә. Тәүҙә сержант, аҙаҡ офицер дәрәжәһенә күтәрелгән, күп кенә орден-миҙалдар менән бүләкләнгән Мөхәммәт Мерәҫов Берлинғаса барып етеп, Бөйөк Еңеүҙе шунда ҡаршылай[56]. Архив мәғлүмәттәре буйынса, түбәндәгеләрҙе өҫтәп әйтергә була: Мөхәммәт Әхмәтйән улы Мерәҫов 1910 йылда тыуған, 1941 йылдың февралендә һуғышҡа ингән, 3 тапҡыр яраланған. 1942 йылдың 30 октябрендә Көнбайыш фронтта дошман менән алышҡан 344-се уҡсылар дивизияһының 1154-се уҡсылар полкындағы 8-се рота снайперы булып һуғышҡан осорҙа бер көндө 5 дошманды, ә был ваҡытҡа барлығы 34 фашисты дөмөктөрә. Ефрейтор Мөхәммәт Мерәҫов «За боевые заслуги» миҙалы менән бүләкләнә. 1945 йылдың 31 майында 137-се уҡсылар дивизияһының 771-се полкында уҡсылар взводы командиры булып хеҙмәт иткән осорҙа яуҙарҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән наградлана. 1985 йылда уға I дәрәжә Ватан һуғышы ордены тапшырыла[57].

Фашизмды еңеүселәрҙең ейәндәре лә ата-олаталарының данлы эштәрен лайыҡлы дауам итә тиһәк, хата булмаҫ, сөнки улар араһынан Чечен Республикаһында һәм Төньяҡ Осетияла тыныслыҡ урынлаштырыуҙа ҡатнашҡан 14 яугир сыҡҡан.

Мерәҫ ауылынан сыҡҡан аҫыл ир-егеттәр араһында Фәнис Мәлик улы Ишморатовтың исеме бөтә илгә билдәле. 2000 йылдың 12 авгусында Фәнис хеҙмәт иткән К-141 «Курск» атом һыу аҫты кәмәһе Баренц диңгеҙендә һәләкәткә тарый. Был фажиғәлә 118 кешенең ғүмере өҙөлдө. «Курск» һыу аҫты крейсеры Баренц диңгеҙендә Североморск ҡалаһынан 175 километр алыҫлыҡта 108 метр тәрәнлектә һыу аҫтына киткәйне. Бортында булған барлыҡ экипаж ағзалары ла батырҙарса һәләк булды. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, шулар араһында Башҡортостандан дүрт диңгеҙсе була: командир Роберт Гесслер, өлкән инструктор Наил Хафизов, кок-инструктор Салауат Янсапов, 1974 йылда Баймаҡ районы Мерәҫ ауылында донъяға килгән техник-турбинасы мичман Фәнис Ишморатов. «Курск» фажиғәһендә ҡорбан булған моряктарға, шулай уҡ дингеҙҙә хеҙмәт иткән яҡташтарыбыҙға ихтирам йөҙөнән Өфөлә 2006 йылда һәйкәл ҡуйылған.

Ҡисәге фронтовиктар, ҡоралдарын һабанға алмаштырып, «НаВИЛ» колхозындағы эште йәнләндереү һәм емерелгән ауыл хужалығын ҡайтанан күтәреү эшенә тотона. 1961 йылда был колхозды «Ҡыҙыл Октябрь» колхозына ҡушалар. 1967 йылда уны Октябрҙең 50 йыллығы исемендәге колхоз тип үҙгәртәләр. 1975 йылда колхоздың Мерәҫ бригадаһы нигеҙендә «Таналыҡ» колхозы булдырыла. Уның етәсеһе итеп Әкрәм Әғзәм улы Ниғмәтуллин тәғәйенләнә. Был яңы колхоз осоронда Мерәҫ ауылында МТМ, механикалаштырылған ток, гараж, автозаправка, ҡаҙанлыҡ, иген келәттәре, мал ҡуралары, балалар баҡсаһы төҙөлә[58].

1982 йылда Сибай совхозына директор итеп ебәрелгән Ә.Ниғмәтуллин урынына колхоз етәксеһе вазифаһына Ирек Ниғәмәт улы Бикмәтов билдәләнә. Был осорҙа ауылда заманса урта мәктәп, Мәҙәниәт йорто һәм китапхана, ашхана, һыу үткәргес кеүек социаль объекттар барлыҡҡа килә, ауыл урамдарына асфальт түшәлә. Мерәҫ һәм Бәхтегәрәй ауылдарындағы тәбиғәт ҡомартҡылары — йөҙйәшәр ҡарағастар кәртәләнеп, ҡурсаулыҡҡа алына. Ошо эштәр һөҙөмтәһендә Мерәҫ ауылы республиканың иң матур ауылы тип билдәләнә. Әммә, ҡыҙғанысҡа

ҡаршы, илдә бер-бер артлы үткәрелгән һәм уйланып еткерелмәгән реформалар арҡаһында сәскә атҡан колхоз бөлгөнлөккә тарый, ауыл хужалығы производство кооперативына әйләндерелә һәм 2010 йылдан һуң был хужалыҡ та тарҡала. Әйтергә кәрәк, ауыл халҡы яйлап булһа ла заманса хужалыҡ итеү тәртиптәренә яраҡлаша бара. Хәҙерге осорҙа элекке колхоз биләмәләрендә бер нисә фермер хужалығы уңышлы эшләп килә[59].

Шулай итеп, бынан теүәл ике быуат элек бөрйән башҡорттары тарафынан нигеҙләнгән, хәҙер Баймаҡ районына ҡараған Мерәҫ ауылының тарихы бик бай. Ауыл кешеләре бөгөн дә ошо тирәлә үҙҙәренең эшлеклелеге, тырышлығы менән айырылып тора, боронғо төбәктәрен бөгөн дә төҙөк, матур итеп тоторға ынтыла, замана үҙгәрештәренә бирешергә теләмәй, тырышып эшләй һәм гөрләтеп йәшәй, иман юлына ҡайтып, уны бәхетле киләсәккә йүнәлеш тип ҡарап, алға өмөт менән атлай.

Мерәҫ халҡы ауылдарының 200 йыллығын быйыл йәй айҙарында тантаналы рәүештә билдәләп үтергә йыйына, ауылдың тарихына һәм уның халҡына бағышланған китап та баҫтырыуға әҙерләнә.

### Һылтанмалар

[1] *Асфандияров А.З.* История сел и деревень Башкортостана и сопредельных территорий. — Уфа: Китап, 2009. — С.92; Башкирская энциклопедия. В 7 т. Т.4. Л—О / гл. ред. М.А.Ильгамов. — Уфа: Башк. энцикл., 2008. — 608 с. : илл., карты. — С.176—177.

[2] Археологическая карта Башкирии. — М.: Издательство «Наука», 1976. — С.189.

[3] Шунда уҡ. — С.194.

[4] *Абдулгафаров Р.* «Таш-Кала» — башкирский Стоунхендж? // Сибайский рабочий. 2015. 15 июля.

[5] *Үтәғолов Р., Тажетдинов А.* Ҡәртәташ тәбиғәт ҡомартҡыһы ғына түгел // Башҡортостан. 2009. 18 ноябрь.

[6] Шунда уҡ.

[7] Саптар юрға//http://soyuzkuraistovrb.ru

[8] *Үтәғолов Р., Тажетдинов А.* Ҡәртәташ тәбиғәт ҡомартҡыһы ғына түгел // Башҡортостан. 2009. 18 ноябрь.

[9] http://urbibl.ru/Knigi/bers/arheol_pamyatniki_10.htm

[10] *Асфандияров А.З.* История сел и деревень Башкортостана и сопредельных территорий. — Уфа: Китап, 2009. — С.87.

[11] Материалы по истории Башкирской АССР. Том I. Часть первая. Башкирские восстания в XVII и первой половине XVIII веков. — М.—Л. Изд-во АН СССР. 1936. Д. №194.

[12] Исследователи-путешественники о Башкортостане. XVIII век / Сост., предисл., коммент. В.В.Сидорова. — Уфа: Китап, 2007. — 288 с.; Материалы по истории Башкирской АССР. Т. II. //http://ufagen.ru

[13] Крестьянская война 1773—1775 на территории Башкирии: Сб. док. — Уфа, 1975. — С.246—247.

[14] Башҡортостан Республикаһының Милли Архивы (артабан БР МА). Ф.138. Оп.2. Д.237. Л.1 об.

[15] *Сулейманов Ф.М.* Абдулла Сурагулов — командир 14-го Башкирского полка // Уральский регион Республики Башкортостан: человек, природа, общество: Материалы регион. науч.-практ. конф., 1 ноября 2013 г. — Сибай: Издательство ГУП РБ «СГТ», 2013. — С.206—212.

[16] Информатор Р.И.Үтәғолов, 1930 йылғы, Сибай ҡалаһы.

[17] *Асфандияров А.З.* История сел и деревень Башкортостана и сопредельных территорий. — Уфа: Китап, 2009. — С.83.

[18] Материалы по истории Башкирской АССР. Т. II. Док. №17. //http://ufagen.ru/node/29259

[19] *Асфандияров А.З.* История сел и деревень Башкортостана и сопредельных территорий. — Уфа: Китап, 2009. — С.92.

[20] БР МА. Ф.138. Оп 2. Д 237. Л 1-15.

[21] *Сулейманов Ф.М.* О тарханах башкирского племени Тунгаур // Урал-Алтай: через века в будущее: Материалы IV Всероссийской конференции, посвященной III Всемирному курултаю башкир. — Уфа, 2010. — 334 с. — С.247—252.; *Сулейманов Ф.М.* Тарханы рода Тунгаур // Ватандаш. — 2010. — №9. — С.198—206.

[22] *Асфандияров А.З.* Башкирские тарханы. — Уфа: Китап, 2006. — С.96—97.

[23] БР МА. Ф.138. Оп.2. Д.566. Л.311 об—313.

[24] БР МА. Ф.138. Оп.2. Д.566. Л.51.

[25] *Асфандияров А.З.* История сел и деревень Башкортостана и сопредельных территорий. — Уфа: Китап, 2009. — С.92.

[26] БР МА. Ф.138. Оп.2. Д.566. Л.21—25; 656 об—659.

[27] БР МА. Ф.138. Оп.2. Д.566. Л.666—667.

[28] БР МА. Ф.138. Оп.2. Д.566. Л.120—121.

[29] БР МА. Ф.138. Оп.2. Д.566. Л.314об—315.

[30] БР МА. Ф.138. Оп.2. Д.758. Л.202 об.

[31] БР МА. Ф.138. Оп.2. Д.758. Л.203 об.

[32] БР МА. Ф.И-295. Оп.2. Д.8.; Имам Ғариф-хажи Ғабдахманов. Баймаҡ ере руханиҙары. — Сибай, 2010. — 53—54-се бб.

[33] Жертвы политического террора в СССР // http://lists.memo.ru/index30.htm

[34] Ҡаҙаҡтарҙы шул ваҡыттағы рус документтарында ҡырғыҙ (киргизцы), тип йөрөткәндәр.

[35] БР МА. Ф.138. Оп.2. Д.566. Л.50об—62; 317об—318.

[36] *Томашевская Н.Н.* От социального пространства к социальному времени: Опыт этнической истории башкирского этноса в новое время. — Уфа: Китап, 2002. — С.118—125.

[37] Документы и материалы по истории Башкирского народа (1836—1842): Формулярные списки о службе чиновников Башкиро-мещерякского войска за 1836—1842 годы: в 2 кн. — Уфа: ИИИЯЛ УНЦ РАН, 2014. Кн 2. 6-й, 7-й, 12-й башкирские кантоны. — 2014. — С.35.

[38] Документы и материалы по истории башкирского народа (1790—1812). Сост.: А.З.Асфандияров, Р.Н.Рахимов, Ф.Г.Хисамитдинова. — Уфа, ИИЯЛ, 2012. — С.292—293.

[39] БР МА. Ф.И-2. Оп.1. Д.4672. Л.133 об—134.

[40] БР МА. Ф.И-2. Оп.1. Д.4672. Л.17 об—18.

[41] БР МА. Ф.138. Оп.2. Д.209. Л.10 об—12 об.

[42] БР МА. Ф.138. Оп.2. Д.758. Л.459 об—467.

[43] *Асфандияров А.З.* История сел и деревень Башкортостана и сопредельных территорий. — Уфа: Китап, 2009. — С.92.; НА РБ. Ф.2. Оп.1. Д.4873. Л.149 об.

[44] БР МА. Ф.138. Оп.2. Д.758. Л.197 об—199, 421.

[45] История административно-территориального деления Республики Башкортостан (1708—2001). Сборник документов и материалов. — Уфа: Китап, 2003. — С.375.

[46] БР МА. Ф.2. Оп.2. Д.13068. Л.17, 17об.

[47] Шунда уҡ.

[48] Оренбургская губерния. Список населённых мест по сведениям 1866 года. — СПб., 1871. — С.45.

[49] Списки населенных мест Оренбургской губернии с общими об ней сведениями. — Оренбург, Губ. стат. ком. 1892.

[50] Список населенных мест. — Оренбург, 1901. — С.62.

[51] *Сулейманов Ф.М.* Таналыково-Баймакский горный округ //Сибай: энциклопедия / гл. ред. Х.Х.Сулейманов. — Уфа: Башк. энцикл., 2015. — 560 с.: илл., карты, ноты. — С.439—441.

[52] Информатор Ә.Ш.Этҡолов, 1930 йылғы, Баймаҡ ҡалаһы.

[53] Населенные пункты Башкортостана. Ч.III. Башреспублика, 1926. — Уфа, 2002. — С.152.

[54] БР МА. Ф.Р-472. Оп.1. Д.556. Л.182—182 об.

[55] Численность населения по населенным пунктам Республики Башкортостан по данным Всероссийской переписи населения 2010 года: статистический бюллетень — Уфа: Башкортостанстат, 2012 — 153с., табл. — С.27.

[56] Ленинец. 1972. №64.

[57] http://podvignaroda.mil.ru

[58] Информатор И.Н.Бикмәтов, 1948 йылғы, Сибай ҡалаһы.

[59] Информатор И.Н.Бикмәтов, 1948 йылғы, Сибай ҡалаһы.